(1932



1977)

# Рәми Ғариптовтың тормош юлы һәм

* **Рәми Йәғәфәр улы Ғарипов 1932 йылдың 12 февралендә Башҡортостандың Салауат районы Арҡауыл ауылында колхозсы ғаиләһендә донъяға килә.**






Гөлмәрйәм апай һәм Йәғәфәр ағай Ғариповтар



Рәми Ғарипов туғандары менән:

әсәһе, ҡустылары Рауил, Урал һәм һеңлеһе Мәршиҙә



Шағирҙың ҡустылары. Һулдан уңға: Урал һәм Рауил Ғариповтар

**1946 йылда Өфөгә килеп, 9-сы башҡорт мәктәбенә уҡырға инә. Фронтта аталары һәләк булған балалар өсөн асылған был мәктәптең интернатында тәрбиәләнә.**



Рәми – интернат уҡыусыһы



Башҡортостан Яҙыусылар союзы тәҡдиме буйынса, 1950 йылда Мәскәүгә барып, М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтына уҡырға керә.



Әҙәбиәт институты студенттары мәшһүр төрөк шағиры Назим Хикмәт менән осрашыуҙа. Һулдан беренсе – Рәми Ғарипов

Рәми Ғарипов 1955 йылдан «Совет Башҡортостаны» гәзитендә эшләй башлай. Унда әҙәби хеҙмәткәр һәм бүлек мөдире вазифаларын башҡара. Бер нисә йыл Башҡортостан китап нәшриәтендә һәм «Ағиҙел» журналы редакцияһында эшләп ала.



Мәскәүҙә тыуған йәш ғаилә – Надежда һәм Рәми Ғариповтар

Ауыр булыр һиңә минең менән…
Тик булмаҫ һис һиңә күңелһеҙ:
Һинең менән сабый ҙа булам,
Таба ла беләм көлкө һүҙ…

# Шағирҙың ғаиләһе



Надя апай, Рәми ағай һәм өлкән улдары Салауат бәләкәй саҡта.



Шағирҙың ғаиләһе. Һулдан уңға: улы Азамат, ҡатыны Надежда Васильевна, ҡыҙы Гөлнара, Рәми Ғарипов һәм улы Салауат

Рәми Ғариповтың матбуғатта сыҡҡан беренсе әҫәре— 1950 йылда “Әҙәби Башҡортостан” журналында баҫылған “Ленин” тигән шиғыры. Әҙәбиәт институтында диплом эше булған тәүге китабы — “Йүрүҙән” исемле шиғырҙар йыйынтығы 1954 йылда донъяға сыға һәм матбуғатта ыңғай баһа алды.

**«Йүрүҙән» һәм «Таш сәскә» китаптары поэзиябыҙға ҙур әҙерлекле, үҙенә талапсан һәләтле шағирҙың килеүен хәбәр итте.**



Ул алтмышынсы йылдар башында тыуған яҡтарына эшкә ҡайтты. Был ҡайтыуын шағир үҙе «Йырҙарыма ҡайтам» тип атаны.




Ҡайтам! Ҡайтам!
Йырҙарыма ҡайтам!
Ҡалып тор һин, гүзәл баш ҡалам.
Минһеҙ ҙә бит бер ни булмаҫ һиңә,
Һин шауларһың минән башҡа ла!

Рәми Ғариповтың «Һабантурғай йырҙары» (1964) һәм «Осоу» (1966) тигән китаптарына ингән шиғырҙары ауылда эшләү йылдарында яҙылған.

Тормош ҡайҙа ла бар,
ҡайҙа ла бер,
Ҡайнап тора тормош
ҡалала.
Ләкин миңә ҡыҙыҡ —
алғы һыҙыҡ,
Ә ул һыҙыҡ
бөгөн далала

Мин тупраҡтан,
ерҙән яралған,
ерҙә тыуып үҫеп,
ерҙә аунап,
ерҙән йыйып
йәнем йыр алған!

**Рәми Ғарипов халыҡ ижадының поэтик эпос традицияларына мөрәжәғәт итеп, бер нисә ҡобайыр һәм шиғри хикәйәт яҙҙы.**

## «Урал йөрәге»

Урал күкрәгендә йөрәк кеүек
Башҡортостан — тыуған илкәйем.
Шул йөрәктең ҡан тамыры булып
Күкһелләнә Ағиҙелкәйем.

Уралҡайым, һинең һәр ташыңа
Ҡанлы-данлы тарих яҙылған,
Илен ҡурсып үлгән ирҙәреңә
Күпме бында ҡәбер ҡаҙылған!..

## **«Салауат батыр»** исемле шиғри хикәйәте

Илкәйенең хөр көндәрен даулап,
Ирек, ырыҫ, Хаҡлыҡ хаҡына
Сал быуаттар аша сапты, сапты,
Сапты һаман ғәзиз халҡына.
Йөҙөп сыҡты етмеш даръяларҙы,
Ярып сыҡты етмеш тауҙарҙы,
Ҡуй һарыҡтай турай-турай сапты
Ҡаршы сыҡҡан етмеш яуҙарҙы...
Ҡаһым түрә утлы Париждарға
Алғасҡыла бәреп кергәндә,
Салауаттың һынын олатайҙар
Еңеү тыуы итеп күргәндәр.



Рәми Ғариповтың Тыуған иле, туған халҡы, туған теле, халыҡ тарихы һәм киләсәге тураһындағы «Урал йөрәге», «Салауат батыр» хикәйәттәре, «Уйҙарым», «Аманат» ҡобайырҙары халыҡса тапҡыр мәғәнәлектәре, эпик ҡоролоуҙары менән иғтибарҙы биләй, шағирҙың фольклор жанрҙарын ижади файҙаланыу оҫталығын күрһәтә.

# «Табыныу»

Мең туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йыл!..
Мең туғыҙ йөҙ утыҙ етелә,
Мең туғыҙ йөҙ Ун Етене ҙурлап,
Илем минең изге ителә.

Мең туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йыл!..
Мең туғыҙ йөҙ утыҙ етелә,
Мең туғыҙ йөҙ Ун Етене хурлап,
Илем минең етем ителә.

Алла ла, батша ла, батыр ҙа —
Азат итмәҫ бер кем беҙҙе,
Бары үҙ ҡулыбыҙ менән беҙ
Яуларбыҙ үҙ иркебеҙҙе.

Кеше ниндәйҙер бер шәхескә түгел, хеҙмәтсән ғәҙел кешегә, кешелеккә табынырға тейеш. «Табыныу» поэмаһының төп айышы шунда.

# «Дон-Кихот»

Күпме ерҙә ялған һәм яуызлыҡ,
Күпме зиһен мәкер-хәйләле.
Ә һин һаман хаҡ ҡылысың менән
Ел-тирмәнгә ҡалдың бәйләнеп!..
Дуçлыҡ төçөн кейә дошманлыҡ,
Һәләтлекте иҙә булдыҡһыҙлыҡ,
Түрҙә йөрөй һаман ҡуштанлыҡ,
Фәлсәфәлә фекер фәҡирлеге,
Ысын тойғо суйын ҡалыпта.
Эше лә юҡ ерҙә хакимдарҙың
Ер тотҡаһы булған халыҡта.



Быуаты исеменән шағир «һәр йөрәккә изге ут» яҡҡанда, хаҡлыҡ даулар Дон-Кихоттар булғанда бер саҡ донъяла хаҡлыҡ-ғәҙеллектәр тантана итәсәк, шунһыҙ мөмкин түгел — монологтың төп асылы ошонда.

# «Аманат»

Телең барҙа илең бар,
Илең барҙа иркең бар,
Иркең барҙа күркең бар,
Ил биҙәргә дәртең бар,
Ерең, күгең — икең бар,
Утың, һыуың — дүртең бар.

Һай, таш булма, таш булма,
Аң ғына бул телеңә,
Аң булмайса, туң булһаң,
Бер имгәк һин илеңә,
Бер түңгәк һин илеңә!

Шағир тел яҙмышын ил яҙмышы, халыҡтың ирке менән берлектә, кешенең иң төп таяныстары – ере, күге, уты, һыуы менән айырылғыһыҙ бәйләнештә ҡарай, ошо хәәтөҡы хәүефле уйҙарын башҡаларға еткерергә ынтыла. Ҡобайырҙың төп маҡсаты – вайымһыҙлыҡтан уятыу, тел яҙмышына битараф булмаçҡа, уны ҡәҙерләргә, һаҡларға саҡырыу.

**Башҡорт теле.**

Мин халҡымдың сәскә күңеленән
Бал ҡортондай ынйы йыямын,
Йыямын да - йәнле ынйыларҙан
Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын.

Шуға ла мин беләм тел ҡәҙерен:
Бер телдән дә телем кәм түгел-
Көслө лә ул, бай ҙа, яғымлы ла,
Кәм күрер уны тик кәм күңел.

Халҡым теле миңә-хаҡлыҡ теле,
Унан башҡа минең илем юҡ;
Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
Иле юҡтың ғына теле юҡ!

Әсәм теле миңә - сәсән теле,
Унан башҡа минең халҡым юҡ,
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ!

Был шиғыры өсөн
Рәми Ғариповты
Яҙыусылар союзы
ағзалығынан
сығаралар

# Тәржемәләр

Ул Пушкиндән, Лермомтовтан, Гейненан, Рудакиҙан, Ғүмәр Хәйямдан, Хетагуровтан, Абайҙан, Блоктан, Есениндан, Рәсүл Ғамзатовтан һ. б. һүҙ оҫталарынан поэзия өлгөләрен башҡорт теленә тәржемә итте. Бынан тыш Иван Франконың, А. Твардовскийҙың әҫәрҙәре, Рәсүл Ғамзатовтың байтаҡ шиғырҙары уның тәржемәһендә башҡортса сыҡты.

Кеше булған кешелә
Мең кешенең эше бар.
Кеше булмаҫ кешелә
Кешенең и эше бар?
Алишер Навои

Ул уҡыған башҡорт мәктәп интернатына Рәми Ғарипов исеме бирелде.



# Рәми Ғариповтың тыуған ауылы Арҡауылда уның йорт – музейы асылды.



Рәми Ғарипов йәшәгән йортта тактаташ асыу

1990 йылдың ноябрендә Рәми Ғарипов исемендәге премияһы булдырылған.



Рәми Ғарипов исемендәге премия лауреаттары:
Х.Назар, М.Бураҡаева, Г.Гиззәтуллина, З.Бураҡаева,
11 синыф уҡыусылары Э.Тулыбаева, Г.Ғәлимова

# Рәми Ғариповтың китаптары.









**Бер минутта донъяны урап сыға-**
**шунда ла арымай.**

# «Уйҙарым» ҡобайыры.



**Уй** -1.Бөтә тормош хәленең кеше аңындағы сағылышы.

2.Аңды биләп алып торған нәмә;хыял

3.Нимәгәлер булған баһалы ҡараш;фекер.

4.Берәй нәмә тураһында барлыҡҡа килгән ниәт,план. (Башҡорт теленең һүҙлеге.)

**Уй** (уйҙары, уйлап, уйҙарым, уйланып, уйҙы, уйлайым, уйлаһын, уйлаһам да) – образ.

**Заман** (заманаһы, заманға; 77 яу; 77 дау (күргән); иртәгәһе, ил иртәһе, көн, ярты төн).

Тематик төркөмдәр:

- -уйҙар
- -заман
- -халыҡ
- -Урал(ил)
- -тел
- -ир

1) Рәми Ғариповтың тыуған йылы, айы һәм көнө?

А) 12.03.1963 йыл

Б) 15.06.1952 йыл

В) 12.02.1932 йыл

2. Рәми Ғарипов ҡайҙа тыуған?

А )Шишмә районы Келәш ауылы.

Б) Салауат районы Арҡауыл ауылы.

В) Дәүләкән районы Яңы Йәнбәк ауылы.

3. Өфөлә ниндай мәктәптә уҡый?

А) 115-се гимназияла

Б) 20-се гимназиялла

В) 9-сы интернат – мәктәптә?

4. Рәми Ғариповтың матбуғатта сыҡҡан беренсе әҫәре:

А) ”Йырҙарыма ҡайтам” шиғыры.

Б) ”Ленин” шиғыры

5. Түбәндәге өҙөктәр ҡайһы әҫәренән?

“Телең барҙа илең бар,

Илең барҙа иркең бар,

Иркең барҙа күркең бар,

Ил биҙәргә дәртең бар.

1)»Аманат» ҡобайырынан

2)Табыныу поэмаһынан

3)»Тыуған тел шиғырынан

6.Рәми Ғариповтың беренсе китабы?

1)Йүрүҙән

2) Таш сәскә.

3)Умырҙаая.

7. Рәми Ғарипов шиғырҙарына яҙылған йырҙар?

1) Уҡытыусыма.

2)Салауат батыр.

3) Башҡорт телендә һөйләшәм.

8.Рәми Ғәриповҡа Салауат Юлаев исемендәге премия нисәнсе йылда бирелә ?

1)1988йыл.

2)1952йыл.

3)2004йыл.

9.Унының иҫтәлегенә ҡайҙа йорт музей асылған ?

1)Арҡауыл ауылында ?

2)Келәш ауылында ?

3)Яңы Йәнбәк ауылында ?

10. Рәми Ғарипов нисәнсе йылда вафат була ?

1)2003 йылда

2)2005 йылда

3)1977 йылда

11. Рәми Ғариповҡа нисәнсе йылда Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән исем бирелә?

1 . 1992 йылда

2.1980 йылда

3.1977 йылда.

Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт!